Төбәк һулышы

# ТӨҘӨКЛӘНДЕРЕҮ ЭШТӘРЕ БАРА

**Республика Башлығы тәкдиме менән 2019 йылдан күп фатирлы йорттарҙа подъездарҙы һәм ихаталарҙы ремонтлау программаһы эшләй башланы. Уның сиктәрендә 3,5 миллиард һумға яҡынса 8,2 мең подъезды яңыртҡандар. Дөйөм алғанда, 4 меңдән ашыу күп фатирлы йорт тәртипкә килтерелгән.**





Хәйбулла районында ла республика программаһын үтәүҙе дауам итеү маҡсатында Аҡъярҙа Мортазин урамындағы тротуар төҙөкләндерелә башланы. Эштәр "Башҡортостан Республикаһының ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" дәүләт программаһы сиктәрендә бойомға ашырыла. Эштәрҙе башҡарыу буйынса муниципаль контракт "Спецстройевец-6 Плюс" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте менән төҙөлгән. Финанслау федераль, республика һәм урындағы бюджеттарҙан, шулай уҡ бюджеттан тыш саралар иҫәбенә башҡарыла. Эштәрҙе тамамлау ваҡыты–2024 йылдың 1 августына тиклем. Тротуарҙың оҙонлоғо–460 метр, киңлеге 1,5 метр тәшкил итәсәк.

Йылайыр районының Йылайыр ауылын төҙөкләндереү, унда йәшәгән халыҡтың йәшәйешен яҡшыртыу маҡсатында күп ҡатлы йорттарҙың ҡыйыҡтарында ремонт эштәре башланған.

Әйткәндәй, Сибай ҡалаһында ла күп ҡатлы йорт ихаталарын төҙөкләндереү дауам ителә. "Башҡорт ихаталары" программаһы шуныһы менән яҡшы: бында эштәр комплекслы тәртиптә алып барыла, йәғни айырым бер урында түгел, тотош ихата төҙөкләндерелә. Икенсенән, ниндәй эштәр башҡарырға икәнлеген кешеләр үҙҙәре хәл итеп, үҙ өлөшөн индергәс, улар мөлкәткә һаҡсыл ҡарашта була. Йыл һайын программала ҡатнашыусылар һайлап алына. Урындағы хакимиәт ниндәй ихатаның төҙөкләндереүгә нығыраҡ мохтаж булыуын иҫәпкә ала.

Дәүләт ярҙамы менән ихаталарҙың төҙөкләндерелеүе яҡшы, ә бына булғандың ҡәҙерен белеү һәм уға һаҡсыл ҡарау–халыҡ намыҫында.

*К.Ишбулдина.*

Һайлау-2024

# Кандидаттар иғтибарына

**2024 йылдың 8 сентябрендә үтәсәк Башҡортостан Республикаһы Башлығы һәм Башҡортостан Республикаһы Сибай ҡалаһы ҡала округы Советына 6-сы саҡырылыш депутаттар һайлауҙарына теркәлгән кандидаттар иғтибарына!**

Башҡортостан Республикаһының «Һайлауҙар тураһында»ғы Кодексына ярашлы, «Атайсал» гәзите 10 августан 6 сентябрҙә тиклем һайлау алды агитация материалдарына майҙан бүләсәге хаҡында хәбәр итә.

Кандидаттарға бүленәсәк бушлай майҙан дөйөм аҙналыҡ майҙандың 10 процентын, йәғни 719 кв.см. тәшкил итә. Дүрт аҙнала ул 2876 кв.см. буласаҡ.

Түләүле майҙан да аҙналыҡ майҙандың 10 процентын, йәғни 719 кв.см. тәшкил итә. Дүрт аҙналағы майҙан–2876 кв.см.

Баҫма майҙан йәрәбә буйынса бүленә. Түләүле майҙандың хаҡы 1 кв.см. өсөн 100 һум (НДС менән бергә). Түләү һайлау фондының махсус иҫәбенән күсерелә. Агитация мәҡәләләре 5 эш көнө алдан ҡабул ителә, ә түләү ике көн алда тулыһынса күсерелергә тейеш.

Сибай ҡалаһы ҡала округы Советына 6-сы саҡырылыш депутаттарын һайлауҙа ҡатнашыусы кандидаттар өсөн майҙан бары тик түләүле бүленә.

**Редакцияның адресы: 453830,**
**Сибай ҡалаһы,**
**Зәки Вәлиди урамы, 22.**
**e-mail: ataisal90@mail.ru**
**Тел.: 8 (347) 75-2-55-04, 8 (347) 75-2-55-08.**

Саралар

**Үткән аҙнала Баймаҡ районының Талҡаҫ күле янында "Журналистика оҫтаханаһы" Көньяҡ-көнсығыш районара ижади берекмәһе журналистарының семинары үтте. Унда Баймаҡ, Сибай, Учалы гәзиттәре редакциялары, Әбйәлил, Бөрйән, Ейәнсура, Йылайыр, Хәйбулла райондары журналистары, "Башҡортостан Республикаһы" нәшриәт йорто, Башҡортостандың Журналистар союзы, Баймаҡ районы хакимиәте вәкилдәре ҡатнашты.**

## *Журналистар семинары үтте*

Тәбрикләү һүҙе менән район башлығы Фәнис Әминев сығыш яһаны һәм ҡатнашыусыларҙы социаль-иҡтисади хәл, урындағы киң мәғлүмәт сараларының эше менән таныштырҙы.

–Һеҙҙең һөнәрегеҙҙең үҙенсәлеге–ул һәр саҡ яңы һөнәри саҡырыуҙарға әҙер булыу, даими үҫешергә ынтылыу. Һеҙ үҙ хеҙмәтегеҙ менән йәмғәтселек фекерен тыуҙыраһығыҙ, властың йәмғәтселек һәм халыҡ менән аралашыуы өсөн нигеҙ булдыраһығыҙ,–тине ул.

Баҫма киң мәғлүмәт сараларының киләсәге хаҡында матбуғатты таратыу бүлеге етәксеһе Айнар Байбулатов һөйләне. Хәҙерге йәмғиәттә уҡыуға йүнәлеш булдырырға кәрәк, тип билдәләне ул.

–Баҫма киң мәғлүмәт сараларының юҡҡа сығыуы тураһындағы пессимистик күҙаллауҙарға ҡарамаҫтан, был фекерҙең дөрөҫ булмауына ышандырырға теләйем. Айырыуса статистика буйынса, тап баҫма киң мәғлүмәт сараларына халыҡ нығыраҡ ышана,–тине ул.

"Журналистика оҫтаханаһы" проекты авторы Ринат Шәйбәков үҙенең ошо уҡ исемдәге авторлыҡ проекты менән таныштырҙы. Шулай уҡ семинар сиктәрендә оҫталыҡ дәрестәре һәм медиатармаҡтың көнүҙәк мәсьәләләренә арналған төрлө секциялар эшләне.

Журналистар Союзы рәйесе урынбаҫары Илшат Зарипов "Яугиргә хат" республика конкурсының еңеүселәрен билдәләне, союз таныҡлыҡтарын тапшырҙы. Еңеүселәр араһында "Баймаҡ ТВ" директоры Зөлфиә Сафина һәм "Һаҡмар" гәзите редакторы Гүзәл Иҫәнгилдина ла бар. Шулай уҡ Сибай һәм Баймаҡ телевидениеһы һаулыҡ һаҡлау өлкәһен яҡшы яктыртҡандары өсөн беренсе һәм икенсе урындарға лайыҡ булды.

*Кәримә Усманова.*



Донъяла

### *Энергетиктар һатыу тыйыла*

Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттарының тәүге уҡыуҙа ҡабул иткән закон проектына ярашлы, 2024 йылдың 1 сентябренән Рәсәйҙә балаларға алкоголһеҙ тонусты күтәреүсе эсемлектәр, шул иҫәптән энергетиктар һатыу тыйыла. Магазинда һатыусы паспорт талап итергә хоҡуҡлы, тип хәбәр ителә Рәсәй Дәүләт Думаһының рәсми сайтында. «Табиптар энергетик эсемлектәрҙең зарарлы икәнен раҫлаған. Улар гипертония, шәкәр диабеты, йөрәк-ҡан тамырҙары һәм башҡа сирҙәргә сәбәпсе булыуы ихтимал. Закон проектының төп маҡсаты–балаларыбыҙҙың һаулығын һаҡлау, йәштәрҙе алама ғәҙәттәрҙән арындырыу»,–тине парламент спикеры Вячеслав Володин.



Башҡортостанда

### *Салауат Юлаев–халыҡ хәтерендә*

Салауат районында милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуыуына 270 йыл тулыуға арналған «Салауат йыйыны» XX республика фольклор байрамы үтте.

Шулай уҡ Салауат Юлаевтың төйәгендә–яндырылған Тәкәй ауылында тарихи-мемориаль комплекс асылды. Бында дәүләт ҡурайсылар ансамбленең тәүге йыйыны үтте.

Салауат Юлаев Башҡортостан өсөн оло әһәмиәткә эйә–ул башҡорт халҡының күңеле, намыҫы, батырлығы. 1812 йылда Салауаттың исеме менән башҡорт яугирҙәре яуға күтәрелгән, Бөйөк Ватан һуғышында дошманды тар-мар иткән. Бөгөн уның вариҫтары махсус хәрби операцияла ҡатнаша. Ике ирекле батальон милли геройҙың исемен йөрөтә. Салауат Юлаев ордены менән республикабыҙ үҫешенә ҙур өлөш индергән шәхестәр наградалана.



Беҙҙең төбәктә

### *Дауыллап алды*

Йылайыр районы хакимиәте башлығы Б.Мелкоедов үҙенең социаль селтәрҙәге сәхифәһендә белдереүенсә, төбәктә ҡапыл көслө дауыл сығып, Матрай ауылында күп ҡатлы йорттарҙың, халыҡ мәҙәниәте һәм ял үҙәге бинаһының, шәхси хужалыҡтарҙың кәртә-ҡураларының ҡыйыҡтарының ҡалай япмаларын, шиферҙарын алып ырғытҡан. Шулай уҡ газ үткәргес тә зыян күргән.

Шаһиттар һөйләүенсә, йәшенле ямғыр менән ҡапыл көслө дауыл сыҡҡан. Ҡайһы бер шәхси йорттар ҙа зыян күргән, ҡоймалар емерелгән. "Тирә-як ҡапыл ҡараңғы булып, көслө ел сыҡты. Ахырзаман килде тип уйланыҡ",–ти зыян күреүселәрҙең береһе.

Быға ҡәҙәр көслө дауыл Әбйәлил районында ла булып, юлдарҙан автомобилдәрҙе ситкә алып ташланы, электр бағаналарын йыҡты, Сиҙәм ауылы мәктәбенең ҡыйыҡын емерҙе, Әүмеш ауылында төҙөлә башлаған йортто һүтеп һалды.

Ғәҙәттән тыш хәлдәр комитеты һауа торошо үҙгәреүсән булғанлыҡтан, иғтибарлы һәм һаҡ булырға кәңәш итә.